**Ҡыйғы йыйыны**

Маҡсат:

1. Йыйын йолаһын тергеҙеү;
2. Уҡыусыларҙа халыҡ ижадына, тарихына, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү;
3. Уҡыусыларҙың һәләттәрен асыу, үҫтереү;
4. Мәктәптең, ата-әсәләрҙең, йәмәғәтселектең балаларҙы тәрбиәләүҙәге бәйләнешен нығытыу.

Йыһазландырыу: Тирмә ҡороу, тирмә янына боронғо көнкүреш әйберҙәрен ҡуйыу, төҫлө балаҫтар, кейеҙҙәр менән биҙәү.

Плакаттар: «Йыйын күрке - сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар». «Халыҡ ҙур ул, көслө ул, дәртле ул, моңло ул, шағир ул, әҙип ул».

Бөгөнгө әҙәбиәт һәм сәнғәт йондоҙҙарының портреттары, әҫәрҙәре. Альбомдар күргәҙмәһе әҙерләү.

Йыйын барышы:

«Урал» көйө яңғырай. Матур тәбиғәт ҡосағында тирмә. Аҡ тирмә хужаһының тамғаһы бейек ҡолғаға элеп ҡуйылған. Тирмәнән хужа сыға.

Хужа (байҡап тикшергәндән һуң) Йә, уландар, балалар , әҙерһегеҙме? Башлайыҡ! Халыҡ йыйылған бит. Әссәләмәғәләйкүм, хөрмәтле ҡунаҡтар! Һеҙҙе Ҡыйғы ерендә ҡаршы алыуыма бик шатмын. Ҡыйғы йыйынын башлайбыҙ. Изге сәғәттә, балалар! (Егет менән ҡыҙға өндәшә.)

Егет Ҡәҙерле дуҫтар! Беҙ бөгөн Ҡыйғы ерендә йыйынға йыйылдыҡ!

Ҡыҙ Ата-олатайҙарҙан ҡалған изге йола\
Йыйын йыйып, халыҡ уйнатыу.\
Мәргән һүҙ әйтешеп, тарих һөйләп,\
Уйнап-бейеп, күңел йыуатыу.

Егет Беҙҙә йыйын, әйҙә йыйын!\
Һүҙ уйнатып, күңел асырға,\
Йырҙар йырлап, бейей-бейей,\
Тыпырлатып килтереп баҫырға.

Уҡытыусы Башҡорт халҡында йыйын йолаһы – бик боронғо күренеш. Халыҡ йолаларының күрке – йыйын, йыйын күрке - сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар тип тиккә генә әйтмәгәндәр. Йыйын, ғәҙәттә, һүҙ, моң оҫталары ярышынан башланған. Мәргәндәр, көрәшселәр көс һынашҡан, етеҙҙәр йүгерешкән. Ҡыҫҡаһы, йыйында һөнәрлеләр һөнәрен күрһәтә, һөнәрһеҙҙәр үҙҙәрен

күрһәтә. Йыйындың хужаһы булып йор тәбиғәтле, абруйлы, йыйын йолаларын яҡшы белгән кеше йөрөй. Йыйын ике көн, хатта унан да оҙағыраҡ барған. Йыйынға халыҡ йыйыр өсөн сапҡынсылар ебәрҙек, һеҙ шул хәбәрҙе алып йыйылдығыҙ. Әйткәнемсә, йыйын сәсәндәр бәйгеһенән башланған. Рәхим итеп, сәсәндәр бәйгеһен ҡарағыҙ!

Егет (Ишектән күренеү менән) Әйҙә, әйҙә, Аҡмулла сәсән, рәхим ит!
Йыйындың уртаһында бул!

Аҡмулла Әссәләмәғәләйкүм халыҡтарға,
Майҙан тотҡан йырсыларға, ҡурайсыларға,
Майҙанда еңеп сыҡҡан ағайҙарға, энеләргә,
Майҙанда уҙып килгән арғымаҡҡа!

Ҡыҙ Ҡаршы алайыҡ. Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағыш сәсән килә!

Аҡмырҙа, Ҡобағыш бергә Һаумыһығыҙ! Йыйынығыҙ мөбәрәк булһын!

Хужа Ҡыҙҙар, ҡунаҡтарға ҡымыҙ сығарығыҙ! (Тирмәнән өс ҡыҙ сыға, кәсә менән ҡымыҙ бирәләр.)

Аҡмырҙа Йәмәғәт! Рөхсәт булһа, беҙ Ҡобағош сәсән менән һүҙ уйнатып,
Һүҙ көрәштереп алыр инек.

Бөтәһе бергә Әйҙәгеҙ!

Аҡмырҙа Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Булаттан үткер , яу һуйыр,
Илгә ҡаршы – хан тиеп,
Ханға ҡаршы – дан тиеп
Хандан ҡурҡмаç бар микән?
Бейҙәң өркмәç бар микән?
Яманлыҡты яҡламаç,
Дошман хәтерен һакламаç -
Кем икән ул, әйт шуны.
Сәсән булһаң, тап шуны.

Ҡобағош Булаттан үткер, яу ҡыйған
Ҡан сығармай яу һуйған,
Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған -
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын?
Яманлыҡты яҡламаç,

Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйөр ул.
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.

Хужа Һай, афариндар, мең рәхмәт!

Аҡмулла Минең дә әйтер һүҙем бар ине.

Хужа, башҡалар Әйҙә, Аҡмулла, рәхим ит!

Аҡмулла Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,
Ҡолағының тышынан,
Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһәң,
Ҡолағының эсенән.
Дөрөҫ һүҙҙең яты юҡ,
Аҫыл һүҙҙең аты юҡ.
Күлдең күрке ҡамыштыр,
Әҙәм күрке намыҫтыр.

Бергә Бик хуп әйтәһең, Аҡмулла. Бик хуп. Бик дөрөҫ.

Хужа Рәхмәт, телеңдән ҡыуан! Һай, аҡһаҡалдар, хөрмәтле сәсәндәр, мең рәхмәт. Һеҙгә еткән сәсәндәр тыумаған әле!

Сәсәндәр Рәхмәт, йәмәғәт!

Егет Уралымдың түрендә
Башҡорт тигән илем бар.
Башҡортомдоң сәсән ире бар,
Сәсәнемдең үткер теле бар,
Теле барҙың ғына иле бар.

Хужа Эйе, егет, һин сәсәндәрсә бик дөрөҫ әйттең. Ысынлап та, беҙҙең халыҡҡа сәсәнлек бик хас.

Егет Башҡорт иле бейек-бейек тауҙарға ла, урман-һыуҙарға ла, гөл баҡсаһындай үҙәндәргә лә бай. Уның йыры ла таштан ташҡа һикереп уйнап ағыусы тау йылғаһындай шаян да, күңелсәк тә!

Ҡыҙ Үҙәнгә төшкәс, киңәйеп һәм тәрәнәйеп киткән йылғалай һалмаҡ, тәрән. Тауҙарҙан артылып яңғыраған аһәңдәй оҙон да, йәш ҡыҙҙар көлөүендәй дәртле лә, саф та!

Егет Һин әйтәһең, дуҫым, йырла тип,
Мин әйтәмен, йырлап булмаҫ, тип,
Аҡ һаҡаллы сәсән ҡарттар әйтә,
Йыйындарҙа йырлау – маҡтау, тип.

Ҡыҙ Йәмле генә Иҙел буйҙарында
Ҡымыҙлыҡтан йыуан да йыуа бар.
Оло йыйын күркәм булһын өсөн
Йырлап – бейей торған йола бар.

Хужа Йәмәғәт! Йырсылар бәйгеһен башлайбыҙ! Бәйге шарты шундай: һәр берегеҙгә берәр йыр башҡарырға,тарихын һөйләргә.

Уҡытыусы Бына һеҙ, уҡыусылар, тарихи йырҙарҙы, йола йырҙарын ишеттегеҙ. Йырҙар – ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған иң ҡиммәтле һәм ҡәҙерле мираҫтыр.

Егет Халыҡтың йыры бар ерҙә бейеүе лә булған.
Баҫ, баҫ, баҫ әле,
Һығылһын иҙәндәре.
Һинән оҫта бейегәнде
Юҡ әле күргәндәре.

Ҡыҙ Бейеүсенең итәге
Бейей-бейей ҡыҫҡара,
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Бейей-бейей оҫтара.

Хужа Бейеүселәр бәйгеһен башлайбыҙ!
Әйҙәгеҙ, бейеүселәр, уртаға рәхим итегеҙ!

Егет Әйҙә, әйҙә, ҡатыраҡ баҫ,
Бейегәндәр күрһендәр.
Баҫҡан ерҙә ут сығара
Беҙҙең йәштәр, тиһендәр.
(бейеү «Лирик бейеү»)

Ҡыҙ Бейер ул, бейер ул,
Бейер өсөн килгән ул,
Уйнап-көлөп күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул.
(бейеү «Бишбармаҡ»)

Егет Әйҙә баҫайыҡ әле,
Бергә баҫайыҡ әле.

Ҡыҙ Бейейек тә, йырлайыҡ та
Күңел асайыҡ әле!
(бейеү «Дуҫлыҡ»)

Хужа Һай, афариндар, күҙ теймәһен, өҙҙөрөп тә баҫтығыҙ!

Уҡытыусы Ҡыйғы йыйыны тамам. Бәйгеләрҙә ҡатнашҡан барлыҡ ҡунаҡтарға, сәсәндәргә, йырсыларға, бейеүселәргә рәхмәт! Йыйынды йыр менән тамамлап ҡуяйыҡ.

Егет Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт!
Боронғоларҙан аманат.
Ҡыҙ Онотмағыҙ ата-бабаларҙың
Тарихын һәм ижадын,
Йолаһын һәм йырҙарын.
Егет Уға ҡылһағыҙ хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.
Хужа Донъялар имен булһын,
Йыйындар гөрләп торһон,
Тағы осрашырға яҙһын!
Бөтәһе бергә Хушығыҙ!